## Иман

Булат КӘРИМОВ

# ҠОРБАН БАЙРАМЫ

Ҡорбан байрамының килеп сығыу тарихы һәм уның йолаһы хаҡында белмәгән кеше юктыр, моғайын. Бөгөн беҙ гәзит уҡыусыларыбыҙға уның тарихи асылына ныҡлап туҡталмайынса, ғөмүмән, ҡорбан салыуҙың нимә икәнен аңлатып бирергә тырышырбыҙ. Бик күптәрҙе: "Ҡорбан байрамында күпме мал һуйыла? Ә ҡан ҡойоу нисек байрам була һуң ул? Ҡорбан салыу вәхшилек түгелме?" - тигән һорауҙар борсой. Бына ошо һорауҙарға яуап биреп, кемдәрҙең дә булһа күңелен "тырнап" торған икеләнеүҙәрҙе юйырға Аллаһы Тәғәлә Үҙе ярҙам итһен.

Ошо һорауҙарҙы Исламда булмаған кешеләрҙән генә түгел, үҙен ислам диненән иҫәпләгәндәрҙән дә ишетергә мөмкин. Был кешеләрҙең миһырбанлы уйҙарына рәхмәттәребеҙҙе генә белдерәбеҙ, сөнки хаҡһыҙға ҡан ҡойоу - ҙур хәрәм. Аллаһы Тәғәлә Фәрештәләргә: "... ер йөҙөндә Үҙемдең урынбаҫарымды булдырасаҡмын", - тип әйткәс, улар: "Һин әллә унда боҙоҡлоҡ ҡылыусыны һәм ҡан түгеүсене булдырмаҡсы булаһыңмы?" - тип ғәжәпләнәләр (Ҡөрьән, "Һыйыр" сүрәһе, 2:30). Сөнки Әҙәм ғәләйһиссәләмгә тиклем ерҙә ендәр йәшәгән булған. Улар бер-берһенең ҡанын түгеп, тамам боҙоҡлоҡҡа бирелеп бөткәс, Аллаһы Тәғәлә фәрештәләрен ебәреп, ендәрҙең күптәрен юҡ итә, тороп ҡалғандарын диңгеҙгә ҡыуа.

Ҡан ҡойоу ғына ла түгел, ғөмүмән, теләһә ниндәй йән эйәһен ниндәй юл менән генә булһа ла хаҡһыҙға үлтереү - хәрәм. Мөхәммәт (саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең бер хәҙисендә: "Турғай үлтерһә лә язаһын йәһәннәмдә күрер", - тигән.

Пәйғәмбәребеҙ ғәләйһиссәләм ваҡытында ғәрәптәр маҡтанышып, ярышып, бер-берһенән уҙышып, кәрәкмәгәнгә хайуандар салыр булғандар. Аллаһ рәсүле был вайымһыҙ ҡан түгеү уйынын ҡәтғи рәүештә тыя һәм хатта былай һуйылған хайуандарҙың итен ашамаҫҡа ла ҡуша (Әбү Дауыт хәҙистәр йыйынтығынан).

Ләкин Аллаһы Тәғәлә үҙенең рәхмәте менән "Йә Син" сүрәһенең 71-се аятында "Күрмәнеләрме ни улар: Беҙ Үҙ ҡулыбыҙ менән барлыҡҡа килтергән нәмәнән уларға малдарҙы бар иттек, һәм улар уға хужа", - ти һәм 72 аятта: "...һәм уларҙың ҡайһы берҙәрен ашар өсөн", - тип аңлатып үтә. Йәғни, Әҙәм балалары һуйып ашаһындар өсөн барлыҡҡа килтерелгән улары, әгәр ашар өсөн булмаған булһа, яратылмаҫ инеләр. Шуға ла сәбәпһеҙгә вегетарианлык (иттән баш тартыу) иғлан итеү ислам динендә тыйыла. Ул Аллаһтың рәхмәтенән баш тартыу, йәки хәләлде хәрәмгә сығарыу бит!

Ғөмүмән, йән эйәһен үлтереү тыйылғанға күрә, Аллаһы Тәғәлә беҙгә хайуандарҙы Үҙенең ризалығын алып ҡына, Уның исеме менән Уны ҙурлап: "Бисмилләһи, Аллаһү әкбәр!" ("Аллаһ исеме менән, Аллаһы бөйөк!") тип кенә рөхсәт иткән. Кем дә кем Аллаһты иҫкә алмаһа, Уның ризалығын алмайынса һуйһа, был хайуандың ризығын ашау ҡәтғи тыйыла, ә уны ашаусы мөшрик (Аллаһҡа тиңдәш тотоусы), йәғни кафыр буласаҡ: "Өҫтөндә Аллаһ исеме иҫкә алынмаған нәмәләрҙе ашамағыҙ, ул, һис шикһеҙ, боҙоҡлоҡ! Шайтандар үҙ дуҫтарының күңелдәренә һеҙҙең менән һүҙ ҡарыштырыуҙы һала, әгәр уларҙы тыңлаһағыҙ, һис шикһеҙ, күп илаһтарға табыныусыларҙан булырһығыҙ" (Ҡөрьән, "Мал-тыуар", сүрәһе, 6:121). Шуға күрә һыйыр, йылҡы иттәрен бөгөнгө ашханаларҙа ашарға кәңәш ителмәй, сөнки улар бисмиллаһыҙ һуйылған булыуы бик ихтимал. Шулай уҡ баҙарҙан билдәһеҙ кешеләрҙән ит һатып алыу тыйыла.

### ҠОРБАН БАЙРАМЫ - ЯРЛЫЛАРҒА ИТ ТАРАТЫУ БАЙРАМЫ

Ҡорбан салыуҙың мәғәнәһе - Ибраһим ғәләйһиссәләмдең ҙур һынауын танып, иман дәрәжәһенең ниндәй ҙур булыуын иҫтә тотоп, уның сөннәте буйынса Аллаһҡа яҡынайыу өсөн салыу. Ә ите иһә икенсе мәсьәлә: кеше, теләһә, саҙаҡа итеп ғаиләһе менән ашай, тоҙлап ҡуя, бешерә. Шуға күрә, Аллаһтан башҡаны хөрмәт итеп ҡорбан салыу Исламда - көфөрлөк. Мәҫәлән, батша килеүенә салыу, кәбер эйәһенә салыу һәм башҡа, әгәр итен һатыу өсөн булмаһа.

Ҡорбан салыуҙың төп талабы - боғаҙлау. Беҙгә был хайуандарҙы ризыҡ итеп яратҡанына Аллаһҡа шөкөр ҡылыу ул. Был көндө ашамайынса, ураҙа тотоп, ауыҙ асҡанда беренсе ризығыбыҙ итеп ҡорбан ите ашау - сөннәт.

Шулай булғас: "Ҡан ҡойоу байрам буламы ни?" тип әйтә алабыҙмы инде? Асылда, был хайуандарҙың иттәре ярлыларға, фәҡирҙәргә таратыла. Шуға ла ҡорбан ғәйетен икенсе төрлө "Ярлы-фәҡирҙәргә ит таратыу байрамы" тинәк тә була.

Миненсә, Ҡорбан байрамы тигән төшөнсәне дөрөҫ аңламайынса был һүҙҙән ҡурҡабыҙ. Ә бит был көн - йылдың иң ҙур көнө: шайтан ҡотҡоһонан алыҫлашып, Аллаһҡа бөтәһе дә - фәҡире лә, байы ла, боҙоҡ кешеһе лә, күркәм холоҡлоһо ла - тәүбә итеп, ғәйет намаҙҙарына таҙа, пак булып, иңгә-иң терәшеп, бер-беребеҙҙе ғәфү итеп, сәләм биреп, ҡотлап, пакланып ҡыуаныша торған көн. Быны Аллаһы Тәғәлә киләсәктә бөтәбеҙгә лә ғөрөф-ғәҙәт итеп, ҡабул итергә насип итһен. Ил буйынса дауыл булып йөрөгән фәхишәлеккә, наркоманияға, эскеселеккә, ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы биш ваҡыт намаҙҙарыбыҙҙы ҡуйып, ғәйет намаҙҙарындағы кеүек ныҡлы сафтар менән берберебеҙҙе юғалтмайынса ҡаршы торайыҡ. Ә ошо йылдағы ҡорбаныбыҙ Аллаһҡа яҡынайыу булыр, иншаллаһ.

### ПӘЙҒӘМБӘРҘЕҢ ТӨШӨ - АЛЛАҺТЫҢ ХӘБӘРЕ

Ибраһим ғәләйһиссәләм үҙенең улы Исмәғил үҫеп еткәс, төш күрә. Төшөндә Аллаһы Тәғәлә уға улын ҡорбан итергә бойора. Бынан һуң ул төшөн Исмәғилгә һөйләп, уның менән кәңәшләшә: "Эй, улыкайым! Мин төшөмдә һине ҡорбанға салғанымды күрәм, ҡара инде, һин ни уйлайһың," - тине. Улы: "Атакайым, һиңә нимә ҡушылған булһа, шуны эшлә, һин мине, иншалла, түҙемлеләрҙән итеп табырһың", - тине" (Ҡөрьән, "Сафтарҙа тороусылар" сүрәһе, 37:102).

Пәйғәмбәрҙең төшө - ул Аллаһтан вәхи (хәбәр). Был Аллаһтың кешелек донъяһына биргән иң ҙур имтиханы, һынауы ине. Әлбиттә, Аллаһы Тәғәлә был имтиханды фәҡәт Үҙенең иң яҡын кешеһенә генә бирә. Башҡаларыбыҙ былдай һынауҙы күтәрә алмай. Хатта бит аңлай ҙа алмайбыҙ, аңлағыбыҙ ҙа килмәй - тәкәбберлек ҡылып: "Был ахмаҡлыҡ", - тип кенә танау сөйҙәрәбеҙ. Бөгөнгө көндә бит һәр беребеҙ балаларыбыҙға "ғибәҙәт ҡылабыҙ": улар тип йәшәйбеҙ, үҙебеҙ кейемәгәнде кейендерәбеҙ, ашамағанды ашатабыҙ, әғүҙүбилләһ! Уларға Аллаһтың кем икәнен дә, барлығын да, Уның ризалығын нисек алыу хаҡында, Уның ҡушҡандарын үтәп, донъяла ла, әхирәттә лә бәхеткә нисек ирешергә икәнен аңлатҡыбыҙ ҙа килмәй. Беҙ бит бөгөн Аллаһтан "күберәк беләбеҙ". Аллаһы Тәғәлә беҙгә кеше үлгәс, ауырығас ҡына кәрәк. Беҙҙең балаларыбыҙҙы әлегә "борсоғо" килмәй, шуға Аллаһтың "әлегә кәрәге лә юҡ". "Хаҡлы ялға сығып, ҡартайғас, аҡ түшәктәргә менеп ултырғас, иншаллаһ, балаларыбыҙ дин тотор әле", - тип уйлайбыҙ... Бына ниндәй "яҡшы уйҙар" менән йәшәйбеҙ!

Үҙебеҙгә ҡалһа: "Әлегә ваҡытыбыҙ юҡ шул, хаҡлы ялға сыҡҡас, иншаллаһ, уҡырбыҙ", - тибеҙ; ә пенсиялағыларыбыҙ: "Беҙ инде ҡартайҙыҡ, беҙҙең ваҡытта дин булманы, хәҙер башҡа кермәй, йәштәр уҡыһын", - тип яуаплайбыҙ. Кемде алдарға теләйбеҙ беҙ?! Дин тотоусыларҙымы, әллә Аллаһтымы?! Үҙ-үҙебеҙҙе, тынысландырырға сәбәп эҙләп, алдайбыҙ:

"Улар Аллаһты һәм иман килтергән кешеләрҙе алдарға теләй, әммә улар үҙ-үҙҙәрен генә алдағандарын белмәй" (Ҡөрьән, "Һыйыр" сүрәһе, 2:9).

### ҠОРБАНҒА ЙӘННӘТТӘН ҺАРЫҠ БИРЕЛӘ

"Әдхә" йәки "ҡорбан" һүҙҙәре тарихта Ибраһим ғәләйһиссәләмгә ҡайтып ҡала, сөнки Ибраһим пәйғәмбәр үҙенең Аллаһҡа тоғролоғон күрһәтте - "әдхә" ҡылды (йәғни, "улын ҡорбан итергә булып, Уға яҡынайҙы" тиеү).

Был имтихан-һынауҙы үтәп, тоғро булғаны өсөн Ибраһим ғәләйһиссәләмгә генә Аллаһтың хәлиле (дуҫы яҡын кешеһе) тигән бер күркәм исем бирелде: Хәлилуррахмән. Уға Исмәғил ғәләйһиссәләм урынына ҡорбан итеп һуйырға йәннәттән һарыҡ бирелә.Шулай Аллаһы Тәғәлә беҙҙең өммәтебеҙгә лә ошо көндө 10-сы Зөлхизә көндө ҡорбан салыуҙы вәжәп итә - фәҡәт ошо көндәрҙә генә, Аллаһтың исеме менән, Уны ҙурлап, ҡорбан ниәте менән "бисмилләһи, Аллаһү әкбәр!" - тип салырға ҡуша.

Әгәр ҡорбан салыусы кеше сауабына ғаиләһен дә ҡушам тиһә: "Бисмилләһи, Аллаһүммә тәкаббәл миннә үә әһли", - тип әйтәбеҙ. Башҡа һүҙҙәр ҡушыу кәрәкмәй! Эйе, төрлө ерҙә төрлөсә яҙалар. Ләкин ишетелгән һүҙҙәрҙең берегһе ле хәҙистәрҙә юҡ, булғандары ла - зәғиф һүҙҙәр, шулай кеше башын ҡатыралар. Улар арҡаһында кешеләр бәхәсләшәләр, ауыр һүҙҙәр әйтешәләр.

Әгәр мәйет исеменә салынһа: "Бисмилләһи, Аллаһүммә тәкаббәл мин фулән (бының урынына исемен әйтәһең)" тип әйтеү кәрәк. Ҡайһы бер ерҙәрҙә ике рәкәғәт намаҙ ҙа уҡырға ҡушалар, был китаптарҙа юҡ, бары тик Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм) "намаҙ ҡылған ерендә һуйҙы" (ғәр. "бимусалләһ", Йәғни "ғәйет намаҙы уҡыған ерҙә" һуйҙы") тип кенә әйтелгән. Күрәһең, кемдер был һүҙҙе "намаҙ менән" тип аңлағандыр.

### БАЙРАМДЫ ҮТКӘРЕҮ ТӘРТИБЕ

Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм): "Зөлхизә айының беренсе ун көнөндә эшләнгән изге эштәрҙән дә Аллаһ алдында һөйкөмлөрәк эш юҡ", - ти (Бохари хәҙистәр йыйынтығынан). Был көндәрҙә Мөхәммәт (саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм) ураҙаны күберәк тотор булған. Хәҙистәрендә лә: "Ғәрәфә көнөндә ураҙа тотҡан кешенең үткән йылдағы гонаһтары ғәфү ителер", - тиелгән. Тағы ла ул былай тигән: "Ғәрәфә көнө - Аллаһы Тәғәлә күп кешеләрҙе уттан ҡотҡарған көн" (Мөслим хәҙистәр йыйынтығынан).

"Әгәр берәйһегеҙ ҡорбан әҙерләһә, Зөлхизә айы кереү менән салынаһы ҡорбанын һуйғанға ҡәҙәр сәсенә лә һаҡал - мыйыҡтарына ла, тырнаҡтарына ла теймәһен - һис бер ни ҙә алмаһын", - ти шулай уҡ Пәйғәмбәр ғәләйһиссәләм (Мөслим хәҙистәр йыйынтығынан). Ғәйет намаҙы уҡылған ерҙәрҙә ҡорбанды фәҡәт намаҙҙан һуң ғына салалар. Намаҙға ҡәҙәр салынһа, ҡорбан һаналмай - һаҡ булығыҙ! Ҡорбан байрамында, йәғни 10 Зөлхизә көнө салынмаһа ла, 11, 12 Зөлхизәнең ҡояш байыуына тиклем дә салырға була әле. Ҡорбан иҫәнимен булып, һарыҡ - алты айҙан, кәзә - бер йәштән, һыйыр - ике йәштән дә кәм булмаҫҡа тейеш. Пәйғәмбәребеҙ: "Ике йәш тулған малды ғына һуйығыҙ! Таба алмаһағыҙ йәки табыуы ауыр булһа, кәзә-һарыҡтан йәки бүлтерек ярай", - тине (Мөслим хәҙистәр йыйынтығынан).

Бер ваҡыт Пәйғәмбәребеҙҙән: "Ниндәй ҡорбандан һаҡланырға кәрәк?", - тип һорайҙар. Бармаҡтарын күрһәтеп, ул былай тип яуап бирә: "Дүртәүҙән: сатанлы икәне күренеп торһа, күҙе һуҡырлығы беленһә, ауырыу булһа һәм ябыҡ малдан (Тирмиҙи хәҙистәр йыйынтығынан).

## Кескәйҙәргә уҡығыҙ

Раушания ӘЙҮПОВА,
Аһылай урта мәктәбе уҡыусыһы
Әбйәлил районы

# ҮҪҠӘН БАЛ ҠОРТТАРЫ

Йәйге салт аяҙ эҫе көн. Иртә булһа ла, ҡояш ҡыҙҙырырға тотонған. Эштәр менән булышырға бынан да матур көн таба алмаҫһың кеүек. Шуғалыр ҙа һәр кем үҙ эше менән мәшғүл.

Бына Айнур ҙа умарталыҡта эшләүсе атаһы янына килде.

- Ә-ә-ә, килдеңдәме ни? - тине Айрат ағай улына.

- Килдем. Атай, бал ҡорттары бигерәк эшсән, тырыш, эйе бит, - тип һоҡланды малай.

- Дөрөҫ әйтәһең, улым. Умарталыҡта башҡарыла торған бөтә эштәр ҙә ҡорттарға бүлеп бирелгән ул. Иртәнсәк, ҡояш йылыта башлағас та, бал йыйыусы ҡорттар яланға оса. Эшһөйәр нәҙекәйбилдәр сәскәнән-сәскәгә ҡунып, татлы бал йыя. Шуға ла сәскә атыусы үҫемлектәр - бал ҡорттары өсөн йәшәү сығанағы! - тип йылмайҙы Айрат ағай улына.

- Әйҙә, улым, баллап сәй эсеп алайыҡ. Йәнгә дауа бит ул бал. Башҡорт балының даны бөтә илгә билдәле. Францияла үткәрелгән Бөтә донъя күргәҙмәһендә башҡорт балы алтын миҙалға лайыҡ булды бит.

- Эйе, балды бөтәһе лә ярата, - тип яуапланы Айнур. Аҙ ғына ултырғас, малай атаһына тағы һорауҙар яуҙырырға тотондо.

- Ә ҡорттар бал йыйғанда сәскәләргә зыян килтермәйме икән?

- Беләһеңме, улым, тәбиғәттә булған бөтә йәнлектәр бер-берһе менән туклана: осар ҡоштар бөжәктәрҙе аулай, бесәйҙәр сыскандарҙы тота. Тик татлы бал йыйыусы ҡорттар ғына тереклеккә зыян килтермәй.

Бына бал ҡорто хуш еҫ бөркөп торған сәскәгә килеп ҡуна. Ул үҙенең нәҙек кенә томшоғо менән сәскәнең тажы төбөндә йыйылған нектарҙы һура. Нектар менән туйынған арала, ул сәскәне һеркәләндереп тә өлгөрә. Бер генә сәскә лә зарарланмай, һуты ла алынып бөтмәй, һабаҡ та, таж да имгәнмәй. Тик һеркәләндерелгән сәскәләр генә орлоҡ бирә. Был орлоҡтар килһе йыл шытып сыға һәм тағы ла бал еҫе аңҡыған сәскәләр барлыҡҡа килә. Бына шулай, улым.



- Атай, бал ҡорттарының көнкүреше шундай мөғжизәле! - тине Айнур.

- Дөрөҫ әйтәһең, улым. Бигерәк зирәкһең, - улына һоҡланыуын йәшермәне атай кеше.

- Йә, ярар. Әсәйең көтәләр, - тип ашыҡтырҙы улын ағай.

Айнур шатланып өйөнә йүгерҙе. Хатта аяҡтары ергә теймәй. Сөнки ул бөгөн атаһы һөйләгәндәрҙән ҡәнәғәт ине.